Таңсулпан ҒАРИПОВА

# КҮҢЕЛЕМӘ ХАЛЫҠ ЙЫРЫ ЯҠЫН

Күренекле йырсы, Салауат Юлаев исемендәге Республика премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Флүрә Әхмәтша ҡыҙы Килдейәрова 1952 йылда Учалы районының Мулдаҡай ауылында тыуа. Ошонда уҡ урта мәктәпте тамамлай.

Флүрәнең сәхнә менән «һаташыуы» бик иртә башлана. Балалар баҡсаһына йөрөгән сағында радио эргәһенән китмәй, бигерәк тә опера буйынса тапшырыуҙарҙы оҡшата. Иптәш ҡыҙҙарын да «опера уйнарға» саҡыра. «Мин һеҙгә йырлап һорау бирәм, һеҙ миңә йыр менән яуап бирегеҙ», — ти. Үҫә төшкәс, китаптан уҡып өйрәнеп «Бүләк», «Зарифа» кеүек халыҡ бейеүҙәрен ҡуя. Үҙе бейеүсе, үҙе хореограф — мәрәкә!..

Мәктәп сәхнәһенән төшмәгән ҡыҙын, урта мәктәпте тамамлау менән, атаһы Өфөгә белгестәргә күрһәтергә, тыңлатырға алып китә. Ошо китеүҙән Флүрә сәнғәт училищеһының хор-дирижер бүлегендә уҡый башлай. Имтихан ваҡытында «Таштуғай»ҙы йырлаған ҡыҙҙы музыка белгесе Флүрә Ноғоманова һәр саҡ иғтибар үҙәгендә тота, уның мөмкинлектәренә ышана.

Училищены тамамлағас, Флүрә Килдейәрова сәнғәт институтының шулай уҡ хор-дирижер бүлегенә уҡырға инә. Уҡыу йортоноң икенсе курсында уҡығанда уҡ Флүрә Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге йырсылар бәйгеһендә ҡатнаша һәм икенсе премияға лайыҡ була. Ошо йылдарҙа ул ҡурайсы һәм башҡорт халыҡ йырҙары белгесе Юлай Ғәйнетдинов менән осраша. Йыраусы менән ҡурайсының дуҫлығы бик емешле була, Флүрә бик күп башҡорт халыҡ йырҙарын өйрәнә, репертуары Баймаҡ яҡтарында сыҡҡан йырҙар менән дә байый.

Унан бирле байтаҡ йылдар үтә, һыуҙар аға. Флүрә Килдейәрованың хеҙмәт юлы ла йырсы һөнәре менән ҡушылып, үрелеп бара. Институтты тамамлағас, опера һәм балет театрында, филармонияла эшләй, сәнғәт институтында вокал буйынса дәрестәр бирә. Учалы районының «йырсылар төбәге» — Мулдаҡай-Илсеғол яҡтарынан сыҡҡан, халыҡ һәм уның бай хазинаһын — рухын күкрәгенә һеңдереп үҫкән ҡыҙ инде йыр сәнғәтенең оло бейеклектәрен яулай. 1995 йылда Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына арнап ике компакт-диск, кассеталар сығара. Теләк ҡылһаң, ярҙамсыһы табыла, тигәндәй, был эштәрҙә ул саҡтағы мәҙәниәт министры Хәләф Хәлфетдин улы Ишморатов ярҙам итә уға.



Халыҡ йырҙары Флүрәнең йырсы булараҡ асылын билдәләһә лә, ул опера жанрында ла эшләй. Һәм, ғөмүмән, Флүрә Килдейәрова кеүек төрлө йыр жанрында үҙен иркен һиҙгән йырсылар күп түгелдер. Флүрәнең репертуарында операнан партиялар ҙа, романстар ҙа, эстрада йырҙары ла халыҡ йырҙары менән бергә йәшәй. Киң диапазонлы йырсы 1985 йылда Бөтә Рәсәй халыҡ йырҙарын башҡарыусылар конкурсында өсөнсө урынды ала. Унан һуң Флүрә Килдейәрова ер шарының бик күп нөктәләрендә була, уның башҡарыуында башҡорт халыҡ йырҙары ҡитғаларҙы яулай, йыһан — мәңгелек менән тоташҡан ауыҙдар сит ил кешеләренә йәнде сәләмәтләндереүсе медитатив музыка булып яңғырай. Голландияла, мәҫәлән, «Буранбай»ҙы тамашасы баҫып алҡышлай.